

**Булат Заһри улы Рафиҟов**

(4 август 1934 – 26 апрель 1998)

Башҡортостандың Мәләүез районы Дәүләтҡол ауылында 1934 йылдың 4 августа уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Юлдаш ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, 1950-1954 йылдарҙа Стәрлетамаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1954-1959 йылдарҙа ул Башҡорт дәүләт университеты студенты. Университетты тамамлап сыҡҡас, үҙе уҡыған Юлдаш урта мәктәбенә уҡытыу бүлеге мөдире булып эшкә ҡайта.

Бер йылдан Өфөгә «Ленинсы» гәзите редакцияһына эшкә саҡырыла. Бында ул әҙәби сотрудник, бүлек мөдире булып 1970 йылға саҡлы эшләй. Журналистика эше унын аҙаҡ «Совет Башҡортостаны» гәзите, «Пионер», «Ағиҙел» журналы редакцияларында дауам итә. Булат Рафиҡов 1980 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы секретары итеп һайлана. 1988-1998 йылдарҙа «Ағиҙел» журналының баш редакторы.

Булат Рафиҡовтың һәм әҙәбиәт публицистика өлкәһендәге эшмәкәрлеге журналист булып эшләү йылдарынан башлана. 1965-1970 йылдарҙа «Ленинсы» гәзитендә баҫылған уның шиғырҙары, очерктары һәм фельетондары публицистик пафосы менән айырылып торҙо. Булат Рафиҡовтың эпик һәләтлелеге проза жанрҙарында асығыраҡ күренә. Ул «Белорет — Шишмә» тимер юлы төҙөүселәре тормошона арналған «Тауҙарҙа ҡар иртә ята» повесы менән китап уҡыусыларҙың иғтибарын тартырға өлгөрҙө. «Лоулла», «Йыһан азаматтары» тигән фантастик повестары менән беҙҙең әҙәбиәттә һирәк осраған жанр тармағында ла уңышлы эшләй алыуын иҫбатланы. Хәҙерге колхоз ауылы тормошонан алып яҙылган

Һуңғы йылдарҙа Б. Рафиҡов тарихи проза өлкәһендә бик актив эшләне. «Ҡараһаҡал» романы 1990 йылдаБашҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. «Сал ҡылған» романы иһә Булат Рафиҡовтың ҙур эпик жанр өлкәһендәге мөмкинлектәрен әйтеп тора. «Эйәрләнгән ат» романында (1993) Б. Рафиҡов С. Юлаевтың, атаһы Юлай Аҙналиндың һәм башҡа пугачевсыларҙың Рогервик ҡәлғәһендә тотҡонлоҡ тормоштарын хикәйәләй, уларҙың рух ныҡлылығын тасуирлай.

**1998 дың 26 апрелендә яҙыусының йөрәге тибеүҙән туҡтаны. 1978 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы ине.**